

*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# УРАЛДА ЯРАЛҒАН, ТАРАЛҒАН БАШҠОРТ ТАМЫРЫ

Юл төшөп, борон ҡан-бабаларыбыҙ, әле лә яҡын ҡәрҙәштәребеҙ ғүмер иткән ерҙән — Свердловск өлкәһе биләмәләренән йәнә сәфәр ҡылабыҙ. Магнитофон таҫмаһынан ағылған ҡурай моңо, башҡорт йырҙары башҡорт йәненең мәңгелеген тойҙорғандай. Мәңгелекте башҡортса йылға, күл, тау, ауыл исемдәре лә һөйләй. Географик атамаларҙың байтағы урыҫ теле ҡалыбына яраҡлаштырылһа ла, төрки сығышлы икәнлектәре беленеп тора. Алтынды тут алмаҫ, тигәндәй, алтынға бәрәбәр милли үҙенсәлектәр ҙә тутланмайҙыр ул.

Свердловск өлкәһендә илле мең самаһы башҡорт йәшәй, халыҡ һаны буйынса бында дүртенсе урынды биләй. Мәгәр милли үҫешкә ирек ҡуйылмаған йылдарҙа ҡәрҙәштәребеҙ урыҫлаштырыуға нык дусар ителә, милли булмышын онотоу сигенә етә. Шулай ҙа тамырҙар ҡоромай, милли йыр-моңға, байрамдарға рухи тартылыш һутын һурып, һығып бөтөрөргә хәлдәре етмәй. Халыҡты хан да еңә алмаҫ, тигән кеүек, урыҫлаштырыу сәйәсәте башҡорт йәнен ҡыя, рухын һындыра алмай.

Милләт яҙмышын ҡайғыртҡан ҡәрҙәштәребеҙ 1997 йылдың көҙөндә Свердловск өлкәһе башҡорттарының ижтимағи ойошмаһын төҙөй һәм киләһе йылда тәүге ҡоролтай үткәрә. Уның ҡарарҙары нигеҙендә Һыуһырт, Түбәнге Сергинск райондарында, Екатеринбург, Түбәнге Тагил, Үрге Пышма ҡалаларында урындарҙағы ҡоролтайҙар булдырыла. Халыҡтың милли үҙаҙын уятыу өсөн «Наурыҙ», Ҡорбан байрамдарын, Һабантуй үткәргәндәр. Башҡортостандың сәнғәт оҫталарын саҡырғандар. Силәбе өлкәһенең Арғаяш халыҡ театры «Ҡыр ҡаҙҙары» спектаклен сәхнәгә ҡуйған. Урал башҡорттары мәҙәниәте, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре күргәҙмәләре, милли көрәш буйынса чемпионат Свердловск өлкәһе башҡорттарының тарихи хәтерен тергеҙеп, рухын күтәреп ебәргән. Башҡорт балаларын Рәми Ғарипов исемендәге республика башҡорт гимназияһына, йәштәрҙе Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарына уҡырға ебәреү ҙә асылды танып белеүгә йүнәлтелгән эш. Ләкин милләтте тергеҙеү һәм үҫтереү тағы ла етдиерәк сараларҙы бойомға ашырыуҙы талап итә: балаларҙы туған телендә уҡытыу, милли рухта тәрбиәләү, башҡортса гәзит сығарыу, радио һәм телетапшырыуҙар алып барыу... Был йүнәлештәрҙә ниәттәр ниәт көйө ҡалған.

2001 йылдың 16 июнендә үткән Свердловск өлкәһе башҡорттарының II ҡоролтайы милли ихтыяждарҙы ҡәнәғәтләндереү буйынса артабанғы эшмәкәрлектең мөһим йүнәлештәрен билдәләне, был йәһәттән эште йәнләндереренә ҙур өмөт бағлап, Башҡарма комитет рәйесе итеп «Евразия» ҡунаҡханаһының генераль директоры Нәфисә Фәсхетдин ҡыҙы Тюменцеваны һайланы. Ышаныс аҡланамы, һы-

нылыш тойоламы, үҙгәрештәр бармы? Беҙ Нәфисә Фәсхетдин ҡыҙының ҙур дәрт-дарман менән эште йәйелдереүен күрҙек.

Ҡоролтай эргәһендә моделдәр агентлығы ойошторолған, башҡорт милли кейемдәре өлгөһөндә һәм үрнәгендә ун биш заманса кейем тегелгән, шуларҙың уны Нәфисә Тюменцеваның үҙ иҫәбенә. Күлдәктәр бик тә күркәм һәм затлы. Һоҡланғыс кейемдәр ижад итеүсе һылыу Нәфисә Тюменцеваның ҡыҙы Валерия икән. Башҡорт кейеменең художестволы биҙәлешен хәҙерге зауыҡҡа ярашлы файҙаланыу милли зиннәттәрҙе танытыу йәһәтенән йәтеш алым, матур күренеш. Башҡорт кейемдәренең заманса моделдәрен күрһәтеүсе ҡыҙҙарҙы Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы вәкиле ихлас итеп «Һылыуҡай» конкурсына саҡырҙы.

Свердловск өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы башҡарған башҡа эштәр ҙә күңелгә хуш. Ҡырҡ ҡәрҙәшебеҙҙе йәлеп иткән «Гөлдәр» ансамбле нәфис гөлдәр кеүек донъябыҙҙы биҙәренә өмөт баглана. Фәғилә апайҙың ғәжәп итеп ҡумыҙҙа уйнауы, үҙенсәлекле итеп башҡорт халыҡ йырын йырлап эйеүе шулай уйлатты. Ансамблдең художество етәксеһе, баянсыһы ла бар. «Гөлдәр»гә сәскә атаһы һәм хозурлығы менән ҡәрҙәштәребеҙҙе илһамландыраһы ҡала. Екатеринбург, Асбест, Һыуһырт ҡалалары сәхнәләрендә ҡуйылған концерттар милләттәштәрҙең рухи донъяһында йәйғор һымаҡ балҡый.

Башҡорт донъяһы менән таныштырыу өсөн ҡырҡ һигеҙ баланы Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөгә алып барғандар. Балалар башҡорт мәҙәниәтен, сәнғәтен күреп, төрлө осрашыуҙарҙан тәьҫирләнеп, күңелдәрен башҡорт рухы менән һуғарып ҡайтҡан. Әле Рәми Ғарипов исемендәге республика башҡорт гимназияһында — өс, художество гимназияһында, иҡтисад лицейында берәр бала, университетта бер талип белем ала. Свердловск өлкәһенән башҡорт балаларын Өфөлә күберәк уҡытырға теләк ҙур. Башҡорт теле буйынса өлкә олимпиадаһын үткәреүҙәре һәйбәт башланғыс.

Региональ белемде үҫтереү институты методисы Зәйтүнә Шәймөхәмәтованың һөйләүенсә, Свердловск өлкәһе башҡорттарының II ҡоролтайы Башҡарма комитетының тәүге ултырышында уҡ өлкәнең башҡорт балалары булған дөйөм белем биреү мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу мәсьәләһе ҡаралған. Был ғәмәлгә ашмаҫ нәмә тураһында һөйләү түгел. «Белем тураһында» Закондың 6-сы статьяһында туған телде өйрәнеү буйынса булышлыҡ күрһәтеү ҡарала. Свердловск өлкәһенең дөйөм һәм профессиональ белем биреү, Закондар сығарыу Йыйылышы тарафынан 1998 йылда уҡ башҡорт теле буйынса дәүләт белем стандарты ҡабул ителгән. Ләкин урындағы мәғариф идаралыҡтары был документты ғәмәлләштереү сараларын күрмәй. Шуға ла урындағы мәғариф идаралыҡтары, белем биреү учреждениелары етәкселәре менән хеҙмәттәшлек итеү, башҡорт телен уҡытыуҙы көн үҙәгенә ҡуйыу мөһим бурыс булып тора ине. Ниһайәт, ҡуҙғалыш тойомлана. Екатеринбург, Асбест, Үрге Пышма, Түбәнге Сергинск, Арт ҡалалары мәғариф идаралыҡтары менән үҙ-ара аңлашыуға өлгәшелгән.

Ҡоролтай Башҡарма комитеты башҡорт теле буйынса дәүләт белем стандартын тормошҡа ашырыу шарттарын булдырыуҙы ла хәстәрләй. Тәүге сиратта башҡортса дәреслектәр, уҡыу ҡулланмалары, нәфис әҙәбиәт алдырылған. Был йәһәттән тоҡарлыҡтар юҡ. Мәгәр мәктәптәрҙе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары менән тәьмин итеү үтә көсөргәнешле. Свердловск өлкәһе юғары һәм махсус уҡыу йорттары башҡорт теле белгестәре әҙерләмәй. Оҙаҡ йылдар башҡорт теле уҡытылмау хәлде ныҡ ҡатмарлаштыра. Шуға ла Башҡортостан Мәғариф министрлығының һәм Мәғарифты үҫтереү институтының булышлығы мөһим. Әйткәндәй, ин-

ститут хеҙмәткәрҙәре, байтаҡ дәреслектәр авторы Хәсән Толомбаев Свердловск өлкәһендә булып, башҡорт телен уҡытыу буйынса фекер алышып, үҙенең кәңәштәрен, тәҡдимдәрен әйткән. Свердловск өлкәһе региональ белемде үҫтереү институты менән бер-нисә йүнәлеш буйынса хеҙмәттәшлек билдәләнгән. Иң тәүҙә башҡорт теле уҡытыусыларының белемен камиллаштырыу буйынса бер йыллыҡ курстар ойоштороу ҡарала. Шуның менән бергә башҡорт телен уҡытыуҙы башҡорт халҡының тарихын, сәнғәтен, мәҙәниәтен өйрәнергә ярҙам иткән программа, методик күрһәтмәләр, урыҫ мөхитендә тәрбиәләнгән балалар өсөн ҡулайлы һәм аңлайышлы ҡулланмалар менән тәьмин итеү зарур. Килешеүгә ярашлы рәүештә, Свердловск өлкәһе башҡорт теле уҡытыусыларына региональ белемде үҫтереү институтында даими методик әҙәбиәт күргәҙмәһе һәм методик ҡулланмалар һатыу ойоштороласаҡ.

Теләгәндә, йөрөгәндә, юллағанда маҡсатҡа өлгәшеп була. Һөҙөмтәлә, мәсәлән, Түбәнге Сергинск районының Өфө-Шәгәр мәктәбендә татар теленән тыш башҡорт теле уҡытыла башлаған. Балалар иһә ата-инәһенең телен теләп өйрәнә. Рәлиә Мөжипова иһә башҡорт теле буйынса өлкә олимпиадаһында еңеүсе булып танылa һәм Өфөлә үткән төбәк-ара олимпиадала ҡатнаша. Ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты рәйесе Нәфисә Тюменцева әйткәненсә, яңы уҡыу йылынан башлап күберәк балалар башҡорт телен өйрәнәсәк, уңыштар ҙурыраҡ буласаҡ.

Свердловск өлкәһендә башҡорт халҡының тарихи ерлеге киң, тамырҙары тәрән. Шуға ла туған телде, милли үҙенсәлектәрҙе тергеҙеү һәм үҫтереү, айырыуса йәш быуынға башҡорт рухын һеңдереү зарур. Быны яҡшы аңлап, Свердловск өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты үҙенең эшмәкәрлегенең төп йүнәлештәрендә дәүләт власы һәм урындағы үҙидара, дәүләт һәм муниципаль учреждениелары, йәмғиәт ойошмалары, йәнә коммерция предприятиелары менән хеҙмәттәшлек итә. Бындай юл, бәйләнеш, мөнәсәбәт дөрөҫ.

Башҡараһы эштәр, бойомға ашыраһы ниәттәр күп әле. Свердловск өлкәһендә ҡәрҙәштәребеҙ тупланып йәшәгән урындарында китапханалар, клубтар, музейҙар, милли-мәҙәни үҙәктәр, Екатеринбург ҡалаһында башҡорт театры булыуын теләй. Шулай уҡ башҡорт телендә гәзит сығарыу, радио һәм телевидениенан башҡортса тапшырыуҙар алып барыу өсөн эфир ваҡыты биреү рухи һәм ижтимағи ихтыяждарҙы тулыраҡ ҡәнәғәтләндерәсәк. Әле ҡоролтай Башҡарма комитеты айына бер тапҡыр «Тыуған ерем» исемле гәзит сығарасаҡ. Башҡарма комитетҡа Свердловск өлкәһе башҡорттарының Башҡортостанда нәшер ителгән башҡортса матбуғат баҫмаларына әүҙем яҙылыуын ойошторорға кәрәк. Әлегә был йәһәттән йоғонтоло эш алып барылмай. Екатеринбургта китапхана һәм уҡыу залы асып, башҡорттар, Башҡортостан тураһында әҙәбиәт, башҡортса гәзит-журналдар менән тәьмин итеп тороу милли үҙаңды тергеҙеү һәм үҫтереүгә булышлыҡ итер ине. Силәбе ҡалаһында зиһенде байытҡан рухи ҡөҙрәт сығанағы — Шәйехзада Бабич исемендәге милли китапхана бар бит. Йәнә Екатеринбургта Башҡортостан ярҙамында милли башҡорт мәҙәниәте һәм сәнғәте үҙәге, Башҡортостанда етештерелгән төрлө тауарҙар, аҙыҡ-түлек магазины булдырыу үҙ-ара хеҙмәттәшлекте көсәйтер ине. Бөгөнгө көн менән генә сикләнмәй, киләсәккә бағып, ҡолас йәйеп эш итеү зарур. Алда торған бурыстарҙы атҡарыу өсөн рухлы, башҡорт йәнле ил азаматтары кәрәк. Шуға ла Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарына сит өлкәләрҙән башҡорт милләтле ҡәрҙәштәребеҙҙе уҡырға алып, уларҙы тарихсылар, телселәр, рәссамдар һәм башҡа өлкә белгестәре итеп әҙерләү маҡсатҡа ярашлы. Шулай эш итһәк, милләтебеҙ йәшәйәсәк, ишәйәсәк. Уралда яралған, таралған бит башҡорт тамыры!

*Алексей ХАМРАЕВ,*
*аспирант Уфимского государственного института сервиса*

# СОЦИАЛЬНЫЙ СТАТУС И ПРОБЛЕМЫ РОССИЙСКОГО ПРЕДПРИНИМАТЕЛЬСТВА

Условия, в которых осуществляется предпринимательство, подвержены изменениям, особенно резким, когда общество находится в переходном периоде, в состоянии реформирования. Начальный импульс радикальным трансформациям придает проводимая реформаторами политика. Но, конечно, их основным источником является инициатива и созидательная энергия различных групп занятого населения. Их заинтересованность и вовлеченность в предпринимательскую деятельность является главной предпосылкой успеха в развитии предпринимательства. Увидеть реальную картину и правильно оценить процесс развития предпринимательства, наметить пути и определить механизмы его совершенствования возможно благодаря всестороннему анализу сложившейся социально-экономической ситуации, выявлению реакции различных групп населения на проводимую государством политику, определению их социального самочувствия (социальная и правовая защищенность, уровень материальной обеспеченности, уверенность в завтрашнем дне, степень доверия к властным структурам, доминирующие установки в массовом сознании и т.д.). В этом сегодня заключается большой общественный интерес.

Развитие предпринимательства означает появление социального слоя людей, ориентированных на самостоятельную, инициативную деятельность, направленную на получение прибыли или личного дохода, способных идти на риск и нести имущественную ответственность за результаты и последствия своей деятельности. Этот слой людей в настоящее время находится на стадии формирования. Есть основания утверждать, что его численность имеет устойчивую тенденцию к росту, а влияние на жизнь страны становится все более заметным. Масштабы, характер этого влияния, а также его зависимость от конкретных условий и обстоятельств могут быть определены с помощью социологических исследований и анализа данных статистики.

Предпринимательство, чтобы стать достаточно массовым и продуктивным, должно получить общественную и государственную поддержку, а занятие различными видами предпринимательской деятельности должно быть включено в систему базовых ценностей значительного числа людей, относящихся ко всем социальным группам. Это, пожалуй, центральная проблема. Ее решение зависит и от социального самочувствия людей, и от их менталитета. Как показывают результаты социологических исследований, проведенных в последние годы в ряде регионов России, преобладающее большинство россиян не ощущает себя в достаточной степени социально защищенным. Социальное самочувствие людей определяется и их отношением к проводимым реформам в целом. Так, результатом завершившейся чековой приватизации явилось перераспределение прав собственности в пользу так называемых реально ответственных собственников. Иначе говоря, созданы предпосылки для изъятия собственности у большинства и концентрации ее у меньшинства. Дискриминация та-